ХАЛҠЫМ ТЕЛЕ – ХАҠЛЫҠ ТЕЛЕ

# Йүрүҙән

12+

САЛАУАТ РАЙОНЫНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ГӘЗИТЕ

20 апрель 2023 йыл кесаҙна
№ 16 (6772)

Ойошторoccылары: Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, БР "Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы

Гәзит 1935 йылдан сыға

Беҙҙең сайт: https://iuruzan.ru/

## 21 апрель – Ураҙа байрамы




**Хөрмәтле Салауат районы мосолмандары! Һеҙҙе мосолмандарҙың төп байрамдарының береһе – Ураҙа байрамы менән ҡотлайбыҙ!**

Изге Рамаҙан айының тамамланыуын билдәләгән был байрам бөтә кешеләр өсөн дөйөм юғары әхлаҡи ҡиммәттәрҙең символы булып тора, ул изгелек һәм мәрхәмәтлек, ғәҙеллек һәм кешелеклелек, шәфҡәтлелек һәм яҡындарыңа һөйөүҙе көүҙәләндерә.

Ураҙа байрамының яҡты көндәрендә һеҙгә ныҡлы һаулыҡ, именлек, бар башланғыстарығыҙҙа уңыштар теләйбеҙ. Һәр йортта шатлыҡ, йылылыҡ, тыныслыҡ һәм татыулыҡ хакимлыҡ итһен!

*Салауат районы Советы рәйесе Ринат Әбдрәшитов, Салауат районы хакимиәте башлығы Марс Кашапов.*

## Депутаттар иғтибарына!

**26 апрелдә 11.00 сәғәттә район хакимиәтенең ҙур залында бишенсе саҡырылыш БР Салауат районы муниципаль район Советының утыҙ дүртенсе ултырышы үткәрелә.**

Совет ултырышына муниципаль район хакимиәте башлығы, уның урынбаҫарҙары, бүлек начальниктары, ауыл биләмәләре башлыҡтары, мәктәп директорҙары, ауыл хужалығы предприятиелары етәкселәре, предприятие, ойошма, учреждение етәкселәре һәм киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре саҡырыла.

Теркәү 10.30 сәғәттә башлана.

*Салауат районы МР Советы.*

## Граждандарҙы ҡабул итеү

**25 апрелдә сәғәт 9.00-ҙән 18.00 сәғәткә тиклем Салауат районы прокуратураһында прокуратура хеҙмәткәрҙәре һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән граждандарҙың хоҡуҡтарын үтәү мәсьәләһе буйынса граждандарҙы тематик ҡабул итеү ойоштора.**

Салауат районы, Малаяҙ ауылы, СССР-ҙың 60 йыллығы урамы, 5-се йорт адресы буйынса мөрәжәғәт итергә.

*Район прокуратураһы.*

## Хәрби хеҙмәткә барырға теләгәндәр өсөн чат-бот эшләй

**Башҡортостанда контракт буйынса хәрби хеҙмәткә барырға теләгән ир-егеттәр өсөн чат-бот эшләй. Уны Башҡортостандың хәрби комиссариаты менән берлектә Республикаға идара итеү үҙәге белгестәре әҙерләгән.**

Һанлы ярҙамсынан потенциаль "контрактсылар" өсөн талаптар һәм кәрәкле документтар, килешеүҙәр төҙөү тәртибе һәм ваҡыты, акса түләү, социаль тәьмин итеү, медицина хеҙмәтләндереүе һәм льготалар һәм башка мәғлүмәттәр алырға мөмкин.

Telegram мессенджерында «Башҡортостан ирекмәне» чат-ботының һылтанмаһы: **https://t.me/contractRBBot.**

*Мәғариф*

# Янғантау мәктәбе яңы автобус алды

## "ГАЗель" микроавтобусы асҡысы мәктәп директоры Фирғәт Ғимрановка тапшырылды

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика райондары мәктәп директорҙарына яңы автобустарҙың асҡыстарын тапшырҙы. Тантаналы сара Өфөнөң "Торатау" Конгресс-холы майҙанында үтте.**

Салауат районынан Янғантау урта мәктәбенә 16 урынлыҡ "ГАЗель" бирелде. Уның асҡысын мәктәп директоры **Фирғәт Ғимранов** алды.

– Беҙҙең мәктәпкә тирә-яҡ ауылдарҙан 365 бала йөрөп уҡый. Атап әйткәндә, Гусевка, Черепан, Бычковка, Покровка, Илтәй, Комсомол һәм Сулпан ауылдарынан уҡыусыларҙы мәктәп автобустары килтерә һәм кире өйҙәренә илтеп ҡуя. Хәҙер өс автобусыбыҙ булды: ике "ГАЗель" һәм бер ПАЗ-ыбыҙ бар. Мәктәп транспортын балаларҙы төрлө сараларға йөрөтеү өсөн дә файҙаланабыҙ, – ти Фирғәт Факил улы.



*Мәктәп директоры Фирғәт Ғимранов яңы микроавтобус янында*

"Башинформ" мәғлүмәтенә ярашлы, Рәсәй төбәктәрендә мәктәп транспортын яңыртыу буйынса федераль программаны тормошка ашырыу сиктәрендә Башҡортостан 45 яңы ГАЗ маркалы мәктәп автобусы алды. Мәктәп автобустары моделдәренең барыһы ла сәғәтенә 60 саҡрымға тиклем хәрәкәт тиҙлеген сикләү ҡулайламаһы, ултырғыстарҙың һәр рәтендә водитель менән бәйләнеш төймәһе, ишектәр асыҡ булғанда двигателдә блокировкалау системаһы, шулай уҡ транспорт сараһының ҡайҙа урынлашыуын күҙәтеү өсөн навигация ҡорамалдары менән йыһазландырылған. Водителдең эш һәм ял режимын машиналарға ҡуйылған тахограф контролдә тота.

Башҡортостанға һуңғы биш йылда дөйөм суммаһы яҡынса 1,8 миллиард һумлыҡ 837 яңы мәктәп автобусы ҡайтарылған.

*Юлдаш ЮЛАМАНОВ.*

*Кеше һәм закон*

# Хеҙмәтте һаҡлау айлығы

**Башҡортостан Хөкүмәтенең һәм Салауат районы Хакимиәтенең ҡарарҙарына ярашлы, хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәт шарттарын һәм хеҙмәтте һаҡлауҙы яҡшыртыу, производство бәхетһеҙлек осраҡтарын һәм профессиональ ауырыуҙарҙы кәметеү буйынса эште көсәйтеү маҡсатында районда 1-нән 30 апрелгә тиклем Хеҙмәтте һаҡлау айлығы үткәрелә.**

Бөтә милек формаһындағы предприятие, ойошма, учреждение етәкселәренә хеҙмәтте һаҡлау айлығына арналған саралар уҙғарырға тәҡдим ителә: хеҙмәт коллективтары йыйылыштары, хеҙмәтте һаҡлау буйынса комиссия ултырыштары; шәхси һәм коллектив һаҡланыу сараларының, санитар-көнкүреш биналарының торошон тикшереү; хеҙмәтте һаҡлау буйынса кабинеттарҙы биҙәү һәм уларҙы норматив-хоҡуҡи документация, уҡыу материалдары менән тәьмин итеү; үҙ биләмәләрендә, административ ҡоролмаларҙа, производство биналарында тәртип урынлаштырыу.

Муниципаль район Хакимиәтенең ҡарары (№178, 27.03.2023 й.) һәм уға ҡушымта менән Салауат районы хакимиәтенең рәсми сайтында "Хеҙмәт мөнәсәбәттәре" бүлегенең "Хеҙмәт шарттары һәм хеҙмәтте һаҡлау" бүлексәһендә танышырға мөмкин.

*Хеҙмәтте һаҡлау буйынса координация советы.*

podpiska.pochta.ru

*Район Хакимиәтендә*

# Башҡортостан Башлығы кәңәшсеһе контракт хеҙмәте тураһында һөйләне

**14 апрелдә Салауат районы Хакимиәтендә контракт буйынса хәрби хеҙмәткә кандидаттар йыйыу мәсьәләһе буйынса осрашыу үтте. Осрашыуҙа Салауат районы хакимиәте башлығы Марс Кашапов; контракт буйынса һайлап алыу пункты хеҙмәткәре, Башҡортостан Башлығының РФ Милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе, Салауат Юлаев исемендәге башҡорт батальонына нигеҙ һалыусы, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Артур Йомағужин; Салауат районы хәрби хәрәкәттәр ветерандары союзы рәйесе Рөстәм Хөснуллин ҡатнашты.**



**Марс Кашапов** үҙ сығышында Салауат ере яугирҙәренең мобилизацияланғандар, Доставалов, Шайморатов, Салауат Юлаев исемендәге батальондар һәм "Ватан" отряды составында махсус хәрби операцияла ҡатнашыуын билдәләне. Республиканың һәр ирекле батальонында Салауат районы яугирҙәре лә бар, улар намыҫ менән беҙҙең азатлыкты һәм неонацистарҙың яңы быуынынан бойондороҡһоҙлокто һаклай.

– 3 апрелдә Малаяҙ ауылында ирекле батальондар ойоштороу штабы филиалын астыҡ, уға лайыҡлы якташыбыҙ **Алик Хәсәнов** етәкселек итә. Бөгөн был штабта эш тулы ҡеүәттә бара, контракт хеҙмәтенә беҙҙән ғаризалар байтаҡ. Ошонда уҡ контракт буйынса хәрби хеҙмәткә инергә теләк белдергән граждандарға буклеттар таратыу һәм хәрби хеҙмәткә яҙылыу тәртибе тураһында аңлатма биреү юлы менән ирекмәндәребеҙ ҙур эш алып бара. Яңынан ойошторолған "Даян Мурзин" һәм "Төньяк Амурҙары" исемендәге ике батальонда Салауат егеттәре лайыҡлы урындар алыр һәм нацистар, Рәсәйҙе күрә алмаусылар алдында тыуған армияның ҡаҡшамаҫ көсөн иҫбатлар, тип ышанам, – тине **Марс Фәррәх улы.**

Шулай уҡ Марс Кашапов район Хакимиәтендә М. М. Шайморатов исемендәге ирекмәндәр штабы эшләүен, унда даими рәүештә гуманитар ярҙам йыйылыуын, Салауат районының битараф булмаған кешеләре көн һайын беҙҙең яугирҙәргә кәрәкле әйберҙәр, аҙыҡ-түлек йыйылмаһы һәм башҡа бик күп кәрәкле әйберҙәр килтереүен билдәләне.

Башҡортостан Башлығы кәңәшсеһе **Артур Йомағужин** осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙы контракт буйынса хәрби хеҙмәткә яҙылыу шарттары, социаль льготалар һәм гарантиялар менән таныштырҙы, контракт буйынса хәрби хеҙмәткә инергә теләгән граждандарға ниндәй документтар тапшырырға кәрәклеге, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға өҫтәмә аксалата түләүҙәр һәм льготалар тураһында һөйләне.

Салауат районы хәрби хәрәкәттәр ветерандары союзы рәйесе **Рөстәм Хөснуллин** махсус хәрби операция башланғандан алып улар Салауат районы граждандарының дөйөм тырышлығы менән 4 УАЗик һәм 4 "Нива", 2 квадракоптер, бензогенераторҙар, бензобысҡылар оҙатыуы, республикала беренселәрҙән булып күсмә мунса ебәреүҙәре тураһында һөйләне.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ирекле батальондар ойоштороу штабы филиалы **Малаяҙ ауылы, СССР-ҙың 60 йыллығы урамы, 5 адресы буйынса урынлашҡан. Бәйләнеш өсөн телефондар: 8-987-592-70-59, 8(34777) 2-00-71, 2-00-16.**

*Светлана МӨХӘМӘТОВА,*
*район Хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы.*

*Кадрҙар мәсьәләһе*

## Буласаҡ табиптар менән осрашыу



*Район етәкселеге студенттар менән*

**12 апрелдә район етәкселеге Башҡорт дәүләт медицина университетында Салауат районы студенттары менән осрашты.**

Сарала район башлығы **Марс Кашапов,** район Советы рәйесе **Ринат Әбдрәшитов** һәм Малаяҙ үҙәк район дауаханаһы баш табибы **Рудольф Фәхретдинов** ҡатнашты. Улар буласаҡ белгестәргә район биләмәһендә ғәмәлгә ашырылған социаль программалар, һөнәри үҫеш перспективалары тураһында һөйләне. Студенттар иһә етәкселәргә үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған төрлө һорауҙар бирҙе.

"Йәш кадрҙар йәлеп итеү – беҙҙең төп бурысыбыҙ. Университетта ауыр, яуаплы, әммә мөһим һәм кәрәкле һөнәр һайлаған йәш, перспективалы егеттәр һәм ҡыҙҙар белем ала. Эшлекле һөйләшеү килеп сыкты. Йәш белгестәр бер нисә йылдан Малаяҙ үҙәк район дауаханаһына эшкә ҡайтыр, тип ышанам. Беҙ уларҙы бик ныҡ көтәбеҙ", – тип осрашыуҙан һуң хәбәр итте хакимиәт башлығы **Марс Кашапов.**

*Лиана ВӘЛИУЛЛИНА.*

*Халыҡ иғтибарына!*

## Ауылдарыбыҙҙы бергәләп матурайтайыҡ!

**15 апрелдән, "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль программаһына ярашлы, яңы төҙөкләндереү объекттары өсөн тауыш биреү башланды. Ул 31 майға тиклем дауам итә.**




Иң күп тауыш йыйған объекттар 2024 йылда федераль бюджеттан финансланасаҡ. Шуға күрә тауыш биреүҙә ҡатнашыу бик мөһим!

Салауат районында 2024 йылда төҙөкләндереләсәк **ике объект: Малаяҙ ауылының Коммунистик урамы тротуарын һәм Янғантау ауылында ял зонаһы** эшләү проекттары тауыш биреүгә ҡуйылған.

**Ҡайҙа тауыш бирергә мөмкин?**

"Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" (ФКГС) платформаһында.

**Нисек тауыш бирергә?**

1. Сайтҡа **https://2.gorodsreda.ru/** инегеҙ, артабан "Тауыш биреү" ("Голосовать") төймәһенә баҫабыҙ.

2. "Тауыш биреү өсөн объекттар" юлында Салауат муниципаль районын (Салаватский муниципальный район) табығыҙ.

3. Ике проект менән танышығыҙ.

4. Үҙегеҙгә оҡшаған проекттың "Тауыш биреү" төймәһенә баҫығыҙ.

5. Теркәү вариантын һайлағыҙ:

- "Дәүләт хеҙмәттәре" ("Госуслуги") порталы аша (порталда теркәлгәндәр өсөн)
- телефон аша – теркәлеү өсөн тикшереү коды шылтыратылған номерҙың һуңғы дүрт цифры буласаҡ.

**Башҡа төрлә тауыш биреү варианттары бармы?**

1.Салауат районы хакимиәтенең рәсми сайты аша **(https://admmaloyaz.bashkortostan.ru/presscenter/news/).** Төп биттә "Минең һайлауым – минең киләсәгем" виджетын табығыҙ. Уға баҫығыҙ.

2. Ирекмәндәр ярҙамында.

*Салауат районы Хакимиәте.*

*Тел. Рух. Иман*

# Башҡорт ырыуҙары башлыҡтарының беренсе ҡоро уҙҙы

**13 апрелдә Өфөлә Башҡорт ырыуҙары башлыҡтарының беренсе ҡоро булып үтте. Ҡор генерал-майор М. Шайморатов һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башланды.**

Сарала бик мөһим эштәр башҡарылды. Башҡорт ырыуҙары советының положениеһы раҫланды, ырыуҙар советы етәксеһе итеп **Вельмир Аҙнаев** һайланды. Совет етәксеһе урынбаҫары, яуаплы сәркәтип һәм Башҡорт ырыуҙары президиумына 9 кеше һайланып ҡуйылды. Кәңәшмәлә төрлө яҡтан килгән ырыу башлыҡтары ла сығыш яһаны. Баҡтиһәң, башҡа ырыуҙар бик әүҙем эшләй икән, 45 ырыуҙан 29 ырыу әллә нисә тапҡыр йыйындар ҙа үткәргән, үҙ гимнын, гербтарын, миҙалдарын да булдырған. Мәҫәлән, меркет ырыуы хатта Халыҡ-ара меркеттәр съезын уҙғарырға йыйына икән. Сит илдәрҙә: Ҡаҙағстан, Монголия, Ҡытайҙа йәшәгән меркеттәрҙе саҡырырға уйлайҙар. Бөрйән ырыуы ла апрель һуңында Өфөлә, “Торатау” Конгресс-холында ҙурҙан съездарын үткәрергә йыйына.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ағзалары барлыҡ башҡорт ырыуҙарының дөйөм йыйынын өс йыл һайын үткәрергә мөмкин буласағын әйтте. Шулай уҡ һәр районда ырыуҙарҙың төп йортон, музейын ойоштороп, килгән туристарҙы таныштырыр өсөн унда ырыуҙың тарихы тураһында мәғлүмәт биреп, картаһын урынлаштырып, күренекле шәхестәре тураһында күргәҙмәләр эшләргә кәңәш иттеләр. Ырыу башлыҡтарына үҙҙәре янында милли рухлы, әүҙем кешеләрҙән командалар төҙөп, тел, тәрбиә һәм башҡа мәсьәләләр буйынса планлы эш алып барырға кәрәклеген билдәләп үттеләр.

Ҡорҙа беҙҙең әйле ырыуының вәкиле булманы, ә мырҙалар ырыуынан вәкил булып Мәсетле ауылынан **Зәнфир Кашапов**, Мөсәттән, мин, **Фәнирә Ғайсина**, ҡатнашты, түбәләҫ ырыуы башлығы булып Башҡорт Илсекәйенән **Рифат Мирхәйҙәров** барҙы. Белеүегеҙсә, беҙҙең Мырҙалар ырыуының йыйыны әле бер тапҡыр ҙа булмаған, башлығы ла һайланмаған. Был йәһәттән беҙ башҡа ырыуҙарға ҡарағанда күпкә артта ҡалғанбыҙ.

Башҡалар алдында маҡтанырлыҡ, заманында ырыуға ғына түгел, барлыҡ милләтебеҙгә рухи юлбашсы булған Байыҡ Айҙар, Рәми Ғарипов һ.б. кеүек арҙаҡлы шәхестәребеҙ була тороп, бөгөн беҙгә артта ҡалыу килешмәй. Донъялағы һәр ҡәүемдең үҙ етәксеһе була, бүре тиклем бүреләр ҙә – баш бүреһеҙ, өйөр айғырһыҙ булмай, ә беҙҙең ырыуыбыҙҙың ысын терәге, алға әйҙәр ғәййәр юлбашсыһы юҡ. Ышаныслы, бөтәһе лә хөрмәт иткән башлыҡтың (лидерҙың) булмауы ырыуҙың киләсәгенә ҡурҡыныс уята. Беҙгә был йәһәттән эште ашыҡтырырға, Мырҙалар йыйынын үткәреп, башлыҡ һайлап, ырыу аҡһаҡалдары ҡорон туплап ҡуйыу кәрәк. Халҡыбыҙ бит электән ырыу аҡһаҡалдарының аҡылына таянып йәшәгән, сөнки ауылдарыбыҙҙың, ырыуҙаштарыбыҙҙың киләсәген, тормош-көнкүреш мәсьәләләрен хәл итеп торор өсөн үҙебеҙҙең аҡыллы, таяныс булырҙай, рухлы кешеләрҙән торған шәхестәребеҙҙе туплау мөһим.

Беҙ ҡасандыр Әйле ырыуы булғанбыҙ, XIV быуатта уртаҡ олатайҙарыбыҙ Имсә бей менән Томса заманынан “Мырҙалар”, тип атала башлағанбыҙ. Имсәнән – Мырҙалар ырыуы, Томсанан Тырнаҡлы ырыуы бүленеп сыҡҡан. Был хаҡта Р. Ғ. Кузеевтың “Археология и этнография Башкирии” (1962) китабында ла телгә алынған.



*Мырҙалар ырыуы вәкилдәре Зәнфир Кашапов, Фәнирә Ғайсина Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башкарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов менән*

Тажетдин Ялсығоловтың “Тарих намә-и болғар” китабынан күренеүенсә, тарихыбыҙ башҡорттарҙан беренсе булып Ислам динен ҡабул иткән Айҙар хан менән бәйле. Хан, бейҙәр нәҫеле булғанға ла, беҙҙе “мырҙалар”, йәғни русса әйткәндә “царевичи” тигәндәр. Мырҙалар Әйле ҡәбиләһенең аҡһөйәктәре булған, быуаттар буйы етәксе органдарҙы ҡулдарында тотоп торғандар. Ҡасандыр ҙур ер биләп йәшәп, бөгөн иһә тарихыбыҙҙы ла онотоп барабыҙ. Шуға ла беҙгә яңынан ырыуыбыҙ, ауылдар, ер-һыуыбыҙ тарихын, шәхестәребеҙ яҙмышын өйрәнергә кәрәк, ә һорауҙар, өйрәнәһе мәсьәләләр байтаҡ йыйылған. Мәҫәлән, риүәйәттәрҙән билдәле булыуынса, Салауат Юлаевтың олатаһының атаһы Дүрмән ҡарт Мөсәт ауылында йәшәгән булған. Ололарҙың һөйләүе буйынса, борон беҙ бер ырыу булғанбыҙ, һуңынан С. Юлаевтың олаталары Мөсәттән күсеп, Йүрүҙәндең теге яғына сығып ултырғандар. Шуға ла уларҙы ни өсөн, ни сәбәпле шайтан-көҙәйҙәр тип атай башлағандарын ғалимдарға тикшерәһе ҡала.

Шулай итеп, ҡасандыр тарихта дәрәжәле урын биләгән ырыуыбыҙҙы яңынан тергеҙергә, исемен, абруйын күтәрергә, тирә-яҡҡа яңғыратырға, үҙебеҙҙе изге эштәребеҙ менән танытырға ваҡыт етте! Шуға ла, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты дәртләндереп торғанда, беҙ ҙә ашҡынып Мырҙалар йыйынын көтөп ҡалабыҙ.

*Фәнирә ҒАЙСИНА,*
*Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре.*
*Өфө ҡалаһы.*

# Фытыр саҙаҡаһы тураһында

**ҠАСАН? Фытыр саҙаҡаһы Ураҙа ғәйете (быйыл – 21 апрель) намаҙына тиклем һәр ғаилә ағзаһы исеменән түләнергә тейеш.**

**НИСӘЛӘ?** Байрам намаҙы, ғәҙәттә, иртәнге сәғәт 8-ҙә йә 9-ҙа уҡыла. Һәр мәсеттә төрлөсә булыуы мөмкин, шуға алдан белешеп ҡуйыу зарур. Ошо намаҙ башланғансы фытыр-саҙаҡаны биреп өлгөрһәң, тотҡан ураҙаңдың Аллаһ Тәғәлә тарафынан ҡабул ителеүенең һуңғы шартын үтәгән тип һаналаһың. Әгәр был ғәмәлде байрам намаҙынан һуң үтәһәң, ул осраҡта ябай хәйер биргән кеүек иҫәпләнәсәк.

**КЕМГӘ?** Саҙаҡа тәү сиратта ярлы йәшәгән, аҙ тәьмин ителгән мосолмандарға бирелә, йә иһә хәйриә эшмәкәрлегенә, урындағы мәсеткә тапшырыла.

**КҮПМЕ?** 2023 йылда Башҡортостанда фытырҙы аҙ тәьмин ителгәндәр – 150 һум, уртаса килемлеләр – 300 һум, хәлле кешеләр 800 һум күләмендә бирә.

**КЕМ?** Был сумманы ирҙәр ҙә, ҡатындар ҙа, балалар ҙа тапшыра. Ғәҙәттә, ғаилә башлығы ҡатыны, балалары өсөн түләй. Байрам көнөнә ҡарата етеш йәшәгән, кәрәк-яраҡ менән тейешенсә тәьмин ителгән һәм фытыр-саҙаҡа түләгәндәй (йә иһә ризыҡлата биргәндәй) хәле булған һәр ғаилә түләргә бурыслы. Фәҡәт аҡсалата бирергә кәрәк, тигәнде лә аңлатмай был. Был ғәмәл мотлаҡ тип ҡабул ителгәндә сүллектә көн иткән халыҡ, башлыса, финик, арпа, бойҙай, йөҙөм менән түләгән, сөнки әйләнештә аҡса түгел, тауар булған. Ошонан сығып, бөгөн беҙ ҙә, мәҫәлән, мохтаждарға ризыҡ менән ярҙам итә алабыҙ.

**НИ ӨСӨН?** "Кеше ураҙа ваҡытында әйтеп ебәргән яман һүҙҙәренән, башҡа яңылышлыҡтарынан таҙарыныһын өсөн һәм мохтаждарға ярҙам күрһәтеү маҡсатында пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт фытыр-саҙаҡаны мотлаҡ ғәмәл иткән", — тиелә Ибн Ғәббәс еткергән хәҙистә.

# Аҡсаһыҙ ҙа биреп булғанын беләһегеҙме?

Сәләм таратыу. Йылмайыу. Йылы һүҙ."Йылы һүҙ ҙә – саҙаҡа" тигән һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (әл-Бохари). Мәсеткә барыу."Мәсеткә табан яһалған һәр аҙым – саҙаҡа" (әл-Бохари, Мөслим). Юлдағы ҡамасауҙы алып ҡуйыу."Юлда ятып зыян килтергәндәй, сәнскеле нәмәне йә һөйәкте ситкә алып ҡуйыу – саҙаҡа" (әл-Бохари, Мөслим).

*** Саҙаҡаны тәү сиратта үҙ ғаиләңә, һинән хәстәр өмөт иткән яҡындарыңа бир (Мөслим).**

Йәғни саҙаҡа өләшеүҙе һинең яуаплылығыңда булған ғаиләңдән башлау хәйерле.

***Аҙашҡанға ярҙам итеү.**

"Ташландыҡ урында аҙашҡан бәндәгә дөрөҫ юл-йүнәлеш әйтеп ебәреү – саҙаҡа".

*** Мохтаждарға ярҙам.**

"Ауыр хәлдә ҡалғандарға, кәмһетелгәндәргә ярҙам ит" (әл-Бохари, Мөслим).

*** Кемделер ашатыу, туйындырыу.**

"Кешеләрҙе һыйлау, шулай уҡ белгән дә, белмәгән дә кешеләр араһында сәләм таратыу", – тигән Пәйғәмбәребеҙ саҙаҡа төрҙәре хаҡында (әл-Бохари, Мөслим).

*** Ағас ултыртыу.**

"Әгәр ҙә мосолман ағас ултыртып, йә нимәләр сәсеп, уның емеше менән ҡош, кеше йә иһә



йәнлек туҡлана икән, был да мәрхәмәт йөҙөнән сарыф ителгән саҙаҡа кеүек ҡабул ителә".

*** Ғәҙеллек яҡлы булыу.**

"Ике кеше араһындағы бәхәсте ғәҙел хәл итеү – саҙаҡа" (әл-Бохари, Мөслим).

*** Физик ярҙам күрһәтеү.**

"Кемдеңдер йөгөн юл йөрөү малҡайына тейәп биреү ҙә – саҙаҡа" (әл-Бохари, Мөслим).

*** Тыйылғандан тыйылыу.**

"Рөхсәт ителмәгәндән йыраҡыраҡ йөрөгөҙ, был да һеҙҙән саҙаҡа булыр" (әл-Бохари, Мөслим).

*Интернет селтәренән.*

*Хеҙмәтенә күрә – хөрмәте*

# Ихласлыҡ менән уҡыусылар күңеленә күпер һалған ул

**Ил Президенты Владимир Путиндың Указына ярашлы, быйылғы 2023 йыл Рәсәйҙә Педагог һәм остаз йылы булараҡ үтә. Элек - электән халҡыбыҙ уҡытыусыны Остаз тип ололаған. Түбәндә биреләсәк мәҡәләлә мин уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы, тәжрибәле остаз, педагог, хеҙмәт ветераны МӨФЛИХАНОВА Алия Абдулла ҡыҙы тураһында яҙып китергә теләйем.**

Алия Абдулла ҡыҙы 1933 йылдың 29 апрелендә Златоуст ҡалаһында тыуа. Һуңынан уларҙың ғаиләһе Салауат районы Лаҡлы ауылына күсеп ҡайта. 1941 йылдың сентябрендә кескәй ҡыҙ 1-се класҡа уҡырға бара. Мәктәпте тик яҡшы билдәләргә генә тамамлағас, ул 1951 йылда Өфө ҡалаһындағы Тимерязов исемендәге Башҡорт педагогия институтына уҡырға инә. Дипломлы филологты Миәшәгәр мәктәбенә эшкә ебәрәләр. Бер йылдан һуң йәш белгес тыуған ауылындағы Лаклы мәктәбенә эшкә ҡайта, ауылдашы Мөфлиханов Аҡшур Суфуат улына кейәүгә сыға. 1961 йылда улар Мөрсәлим ауылына килеп урынлаша. Алия Абдулла ҡыҙы Ҡалмаҡол урта мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәтен уҡыта башлай, хаҡлы ялға сыҡҡансы ошо һөнәренә тоғро ҡала.



Остазыбыҙҙың хеҙмәт юлы ябай ғына кеүек. Тик ул үҙ эшен яҡшы белгән, тәрән һөйөү, ихласлыҡ менән уҡыусылар күңеленә күпер һалған кеше. Шулай булмаһа, бик күп уҡыусылары уның үҙе кеүек уҡытыусы һөнәрен һайлар инеме? Бына улар: Закирова Шәрифә Мөхәмәт ҡыҙы, Йәнбирҙина Сәмсинур Раян ҡыҙы, Мөхәрәмова Рәйсә Мирсаяф ҡыҙы, Мөләкова Рәсимә Хәбиб ҡыҙы, Ишморатова Рауза Ғәрифйән ҡыҙы, Ҡорбанғәлиева Минзилә Ғабдрафиҡ ҡыҙы, Мөхөбуллина Фирүзә Ринат ҡыҙы. Улар үҙ ғүмерҙәрен балаларға белем биреүгә бағышланы, ә Хәсәнова Әлфридә Файзрахман ҡыҙы менән Ханова Гөлнара Сабирйән ҡыҙы тәрбиәсе булып балалар баҡсаһында эшләнеләр.

Мин дә Ҡалмаҡол мәктәбенә 4-се класҡа уҡырға килгәс, ни өсөндөр Алия Абдулла ҡыҙына иғтибар иттем. Нурлы йөҙлө, ихлас күңелле, ыҫпай кейемле уҡытыусы ниндәйҙер бер илаһи зат булып тойола торғайны. Беҙҙән бер йәшкә өлкәнерәк балаларҙың класс етәксеһе булған апайға ситтән генә ҡарап йөрөй торғайным. Һуңынан Алия Абдула ҡыҙы сит ауылдарҙан йөрөп уҡыған балалар өсөн асылған оҙайлы көн төркөмөн ҡабул итте. Миңә лә ошо төркөмдә шөғөлләнеү бәхете эләкте.

Алия Мөфлиханова ауылдарҙан килгән балалар өсөн ысын остаз була алды. Өйгә эштәребеҙҙе әҙерләтеп кенә ҡалмай, төрлө темаларға тәрбиәүи әңгәмәләр үткәрә торғайны. Китап уҡыуға һөйөү тәрбиәләү маҡсатында, йыш ҡына төрлө әҫәрҙәр тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирер ине. Һуңынан уҡылған китап буйынса фекер алышыу уҙғарыла. Уның етәкселегендә концерт номерҙары әҙерләп, күрше ауылдарҙағы фермаларға барабыҙ, ҡыҙыл мөйөштәрҙә сығыш яһайбыҙ. Унда эшләгән ата-әсәләр, колхозсылар беҙгә рәхмәттәр әйтеп, күңелдәребеҙҙе үҫтереп ебәрәләр, тағы килеүебеҙҙе һорайҙар. Баштарыбыҙ түбәгә тейеп, ҡыуанышып ҡайтып китәбеҙ. Ҡайһы ваҡыт уҡытыусыбыҙ беҙҙе ауыл фермаһына эшкә алып бара. Унда һауынсыларға ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтәбеҙ. Бынан тыш, яҙлы-көҙлө мәктәп баҡсаһында ла ҡайһы бер эштәрҙе башҡарабыҙ.

Алия Абдулла ҡыҙының иң һоҡландырғыс сифаты – балаларҙың барыһын да берҙәй күреп, ихлас яратыу. Уның кемгәлер тауыш күтәргәнен мин хәтерләмәйем. Һәр уҡыусының дуҫы була белде. Ниндәйҙер етешһеҙлекте йәки дөрөҫөрәк булмаған аҙымды күрһә, эргәһенә саҡырып алып, шыбырлап ҡына кәңәш бирә. Бигерәк тә күрше ауылдарҙан йәйәү йөрөп уҡыған балаларға ныҡлы терәк була торғайны. Аҙ комплектлы мәктәптәрҙән килгән уҡыусыларға урыҫ мәктәбенә өйрәнеп китеү бик ауыр ине. Быны яҡшы аңлаған уҡытыусыбыҙ уларға һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торҙо.

Алия Абдулла ҡыҙы хаҡлы ялға сыҡҡас та, уҡыусылары өсөн кәңәшсе, дуҫ, терәк булып ҡалды. Урмансы мәктәбендә оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләгән Закирова Шәрифә Мөхәмәт ҡыҙы (хәҙер мәрхүмә инде) йыш ҡына остазының хәлен белеп, уның менән аралашып, кәңәшләшеп торҙо. Ул үҙ уҡытыусыһына һәр саҡ рәхмәтле булды. Район гәзитендә Шәрифә Закированың “Рәхмәт уҡытыусыма!” тигән мәҡәләһе һәм “Рәхмәт хаты” тигән шиғыры ла баҫылып сыҡты. Мөрсәлим мәктәбендә уҡыҡан уҡыусылары Ишморатова Рауза Ғәрифйән ҡыҙы менән Ҡорбанғәлиева Минзилә Ғабдрафиҡ ҡыҙы, Мәсетле районында уҡыткан Мөхөбуллина Фирүзә Ринат ҡыҙы ла остаздары менән бәйләнеште өҙмәй, тормоштарында ниндәй генә сетерекле хәл килеп тыумаһын, иң тәүҙә уҡытыусыларына мөрәжәғәт итәләр. Шулай уҡ Алия Абдулла ҡыҙына гел генә йөрәк түренән сыҡҡан рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә тырышалар.

Ҡорбанғәлиева Минзилә Ғабдрафиҡ ҡыҙы, остазының һәр юбилейына арнап, район гәзиттәрендә матур йөкмәткеле мәҡәләләр менән сығыш яһаны. Мәктәп музейы өсөн яратҡан уҡытыусыһының тормош юлын сағылдырған стенд әҙерләүҙе лә ул башлап ебәрҙе. Республика буйынса уҙғарылған “Һуғыш балалары һөйләй” видеофильм конкурсында эшен хөрмәтле остазына арнаны. Конкурста беренсе урынды яулаған видеофильм Алия Абдулла ҡыҙы өсөн бик ҡиммәтле бүләк ине. Бынан тыш, Минзилә Ғабдрафиҡ ҡыҙы ветеран уҡытыусыны йыш ҡына мәктәпкә саҡырып, төрлө фәһемле саралар ойошторҙо. Башҡа уҡыусылары ла изге йөрәкле уҡытыусыларын онотмай, шылтыратып, хәлен белешеп торалар, байрам мәлдәрендә килеп ҡотлап та китәләр. Остазыбыҙ үҙе лә бик иғтибарлы. Район, республика гәзиттәрен уҡып, уҡыусыларына, мәктәп тормошона ҡағылышлы барлыҡ мәғлүмәттәр менән танышып, уларҙы айырым бер папкаға туплап бара. Танышып ҡына ҡалмай, ә уларҙың уңыштарына ла ысын күңелдән һөйөнә, шылтыратып ҡотлай, аҡыллы кәңәштәрен бирә.

Әлеге мәлдә Алия Абдулла ҡыҙы ике ҡыҙының, ике улының, 6 ейәнсәре, 4 ейәне, 8 бүләсәре һәм 8 бүләһенең һөйөүенә, иғтибарына, наҙҙарына күмелеп, уларҙан ҡәҙер-хөрмәттәр күреп йәшәй. Уға тән сәләмәтлеге, күңел тыныслығы, ғаилә именлеге теләйбеҙ. Яҡындарын шатландырып, уларҙың уңыштарына, бәхеттәренә ҡыуанып тағы оҙаҡ йылдар йәшәргә насип булһын!

*Юлиә ДИЛМӨХӘМӘТОВА,*
*Мөрсәлим урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы .*

*Спорт*

# Арҡауыл ҡыҙҙарының космик еңеүе!

**Кушнаренко районында Балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбенең физкультура-һауыҡтырыу комплексы нигеҙендә 2008–2009 йылғы ҡыҙҙар араһында "Гагарин Кубогы" мәктәп баскетбол лигаһы республика турниры финалы үтте.**

Турнир Башҡортостан Республикаһы уҡыусылары Спартакиадаһы сиктәрендә уҙғарылды.

"Гагарин Кубогы" мәктәп баскетбол лигаһы республика турниры финалында ҡатнашыусы Байыҡ Айҙар исемендәге **Арҡауыл урта мәктәбенең ҡыҙҙар командаһы бронза призер булды.**

Районыбыҙҙа мәктәп баскетболының был ҙур уңышы. Команданы ошондай һөҙөмтәгә килтергән физик культура уҡытыусыһы, команда тренеры **Валерик Иҙрисовтың** да ул ҙур тырышлығы. Лигала йәмғеһе 1000 команда ҡатнашты. Республика буйынса өсөнсө урын яулауҙары менән тренерҙы һәм команданы ихлас ҡотлайбыҙ.

*Наталья КАМАЛЕТДИНОВА,*
*ДЮСШ завучы.*



*Арҡауылдың баскетболсы ҡыҙҙары етәкселәре Валерик Иҙрисов менән*

podpiska.pochta.ru

*Конкурстар*

# Һәләтле лә, һылыу ҙа Салауат ҡыҙҙары

**14 апрелдә район мәҙәниәт йортонда “Район мини-мисы” конкурсы уҙғарылды. Быйыл сәхнәгә дүрт ҡыҙ сыҡты. Үҙҙәре бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, улар көслө тауыштары, дәртле бейеүҙәре, сәхнәлә үҙҙәрен иркен тотоуҙары менән һоҡландырҙы.**

Бәйгенең тәүге һынауы – визиткала уҡ конкурсҡа шәп, көслө ҡыҙҙар йыйылғаны билдәле булды. Кескәй һылыуҡайҙар үҙҙәре һәм буласаҡ һөнәрҙәре тураһында конкурсҡа видеопрезентация әҙерләп килтергәйне. Артабан жюри ағзалары уларҙың дизайнға һәләтен һынаны. Бәләкәстәр, ата-әсәләренең ярҙамы менән, матур-матур күлдәктәр эшләгәйне. Берәүҙәр сәхнәгә көнкүрештә ҡулланылған төрлө материалдарҙан яһалған күлдәктәр менән сәхнәгә сыҡһа, икенселәр тәбиғи туҡымаларға өҫтөнлөк бирҙе. Һынауҙың был этабында Татар Малаяҙы ауылынан **Ангелина Ямаеваның “Малифисента”** костюмы барыһын да һоҡландырҙы. Ул изолондан ҡанаттар эшләп, серле фея образында сәхнәгә сыҡты. Сулпан ауылынан **Самира Хужинаның – “Мальвина”**, Малаяҙҙан **Азалия Закированың – “Балерина”**, **Ульяна Юдинаның “Ҡыҙыл башлыҡ”** образдары ла бик отошло килеп сыҡҡайны. Ҡыҙҙарҙың һәр кеме костюмдарын яҡлап сығыш яһаны.



“Район Мини-мисы” бәйгеһендә ҡатнашыусылар. Еңеүсе Азалия Закирова (уңдан икенсе)



“Йүрүҙән” һылыуы Ангелина Ямаева

Бәләкәй һылыуҙар үҙ һәләттәрен дә күрһәтте. Самира Хужина ҡурсаҡ булып бейене, Азалия Закирова һәм Ангелина Ямаева йырланы, ә Ульяна Юдина фортепианола уйнаны.

Ҡыҙҙар тамашасыларҙың иғтибарына шулай уҡ “кэжуал” стилендә байрам күлдәктәрендә лә дефиле күрһәтте. Улар сәхнәлә, һыуҙағы аҡҡош һымаҡ, йөҙөп кенә йөрөнө, йөҙҙәренән йылмайыу китмәне. Бынан тыш, жюри ағзалары уларҙың зирәклеген дә баһаланы. Ҡыҙҙар әкиәттәргә ҡағылышлы төрлө һорауҙарға тапҡыр яуаптар бирҙе.

“Район мини-мисы” конкурсының һуңғы этабында кескәй һылыуҙар сәхнәгә бал күлдәктәрендә сыҡты. Ҡыҙҙар йәнһүрәт геройҙары менән вальста әйләнеп, барыһын да таң ҡалдырҙы.

Шулай итеп, матур тамаша аҙағына ла яҡынлашты, сәхнәгә жюри ағзалары сығып, уның һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. **“Район мини-мисы”** конкурсының **еңеүсеһе тип Азалия Закирова** (Малаяҙ) танылды. **“Талантлы мини-мисс” – Ангелина Ямаева** (Татар Малаяҙы), **“Һөйкөмлө мини-мисс” – Ульяна Юдина** (Малаяҙ), **“мини-миссы артисы” номинацияһында Самира Хужина** (Сулпан) еңеүсе булды. Һәр һылыуҡайға бүләктәр, Диплом һәм зауыҡлы таждар тапшырылды.

Йола буйынса, конкурстың финалына үткән ҡыҙҙарҙың өсәүһе шулай уҡ “Йүрүҙән" гәзите һылыуы” интернет конкурсында ла ҡатнашты. Иң күп тауыш йыйған **Ангелина Ямаева “Йүрүҙән һылыуы”** исеменә лайыҡ булып, уға Диплом һәм гәзиттең махсус бүләге тапшырылды.

*Лиана ВӘЛИУЛЛИНА.*

*Һәләтле балалар*

# Виктория “Орленок”та ял итте

**Янғантау урта мәктәбе уҡыусыһы, “Шоңҡар” үҫмерҙәр һәм йәштәр клубының “Изгелек үҙәге” әүҙемсеһе Виктория Сафина Краснодар крайында “Орленок” Бөтә Рәсәй балалар үҙәгендә булып ҡайтты. Ул әүҙем тормош ҡарашы, ирекмәнлек эшмәкәрлегендә күрһәткән уңыштары һәм ҡаҙаныштары өсөн “Орленок”тың 4-се сменаһына юллама менән бүләкләнде.**



Балалар үҙәгендә Викторияны уның тормошонда ғәҙәти булмаған ваҡиғалар көттө. Унда балалар һәм үҫмерҙәр өсөн “Донъя тураһында хәстәрлек күреү” тип аталған ҙур мәҙәни-мәғариф программаһы әҙерләнгәйне. Программа үҫмерҙәрҙең шәхес-ара аралашыу өлкәһендәге тәжрибәһен байытыуға һәм Рәсәйҙең мәҙәни-тарихи мираҫы менән танышыуға йүнәлтелде. Смена улар сиктәрендә “Орлёнок”тың тарихын, мәҙәниәтен, архитектураһын һәм тәбиғәтен өйрәнде, социаль әһәмиәтле идеяларҙы һәм проекттарҙы тормошҡа ашырҙы. Балаларҙың һәр береһе “йәш дипломаттар академияһы”нда ҡатнашты. Смена йомғаҡтары буйынса һәр балаға сертификаттар тапшырылды. Тырыш ҡыҙ смена эшмәкәрлегендә әүҙем ҡатнашҡаны һәм социаль проектты тормошҡа ашырғаны өсөн грамоталар һәм дипломдар менән бүләкләнде.

*Алина АЛКИНА.*

*Конкурстар*

# “Салауатсылар” – икенсе урында

**Дыуан районы Вознесенка урта мәктәбендә "Һаҡлаусылар, алға!" республика конкурсының зона этабы үтте. Был сарала Балаҡатай, Дыуан, Ҡыйғы, Мәсетле, Салауат райондарынан 5 команда ҡатнашты.**



Салауат районынан "Салауатсылар" командаһы сығыш яһаны. Команда составында Малаяҙ башҡорт гимназияһының 4 "б" класының 6 уҡыусыһы сығыш яһаны. Конкурсҡа балаларҙы уларҙың класс етәкселәре **Раушания Нурҡаева** әҙерләне.

Конкурс түбәндәге этаптарҙан торҙо: “Командаларҙы сәләмләү”, “Ҡаршылыҡтар һыҙаты”, “Ориентирлау”, “Экология”, “Капитандар конкурсы”, “Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге”, “Тыуған яҡты өйрәнеү”, “Остаздар конкурсы” һәм “Робототехника”.

"Командаларҙы сәләмләү" этабына уҡыусылар ныҡлы әҙерләнгәйне һәм яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте. Ҡаршылыҡтар һыҙаты ҡатмарлы булды, шулай ҙа бөтә командалар ҙа уны үтәп сыҡты. "Салауатсылар" командаһы тыуған яҡты өйрәнеү этабында иң яҡшылары булды. Балалар өсөн иң мауыҡтырғысы "Робототехника" этабы булғандыр. Был конкурста ҡатнашыусылар алдына робот-тейәгес менән идара итеү бурысы ҡуйылды. "Ориентирлау" этабында һәр ҡатнашыусыға картала һүрәтләнгән конустарҙы дөрөҫ билдәләргә кәрәк булды.

Ярыш йомғаҡтары буйынса “Салауатсылар” командаһы зона этабында 2-се урынды яуланы. Команданы еңеүҙәре менән ҡотлайбыҙ!

*Гүзәл НӘҒИМОВА,*
*Балалар ижады йорто методисы.*

## Төрләһөнән

### Яңы дәүләт наградаһы булдырыла

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттары закон проекты менән республикала яңы дәүләт наградаһын – генерал Шайморатов миҙалын булдырырға тәҡдим итә.**

Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, был награда йәмәғәт тәртибен һаҡлағанда, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә кешеләрҙе ҡотҡарғанда, ғүмер өсөн хәүефле шарттарҙа хәрби, гражданлыҡ йәки хеҙмәт бурысын үтәгәндә күрһәткән ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ өсөн тапшырыла.

Бер үк ваҡытта закон проекты менән ошо исемдәге орден менән бүләкләү өсөн нигеҙҙәр аныҡлана.

«Генерал Шайморатов ордены республиканың ошо уҡ исемдәге миҙалға ҡарата юғары дәүләт наградаһы булыр тип күҙ уңында тотола, – тине **Константин Толкачев.** – Орден менән ғүмер өсөн хәүефле шарттарҙа хәрби, гражданлыҡ йәки хеҙмәт бурысын үтәгәндә фиҙакәрлек һәм батырлыҡ күрһәткән граждандар бүләкләнә».

«Башинформ» асыҡлауынса, закон Башҡортостан бюджеты иҫәбенә тормошҡа ашырыла.

### Электрон повесткалар әлегә таратылмаясаҡ

**Рәсәй Цифрҙар министрлығы хәбәр итеүенсә, әлеге мәлдә дәүләт хеҙмәттәре порталы аша повесткалар таратыу өсөн нигеҙ юҡ.**

Ведомствоның телеграм-каналында билдәләүҙәренсә, ҡабул ителгән хәрби иҫәпте цифрлаштырыу тураһындағы законда электрон повесткаларҙың “Дәүләт хеҙмәттәре” аша ебәреләсәге күрһәтелмәгән. Повесткаларҙы йүнәлтеү ысулдарын Рәсәй Хөкүмәте айырым акт менән билдәләргә тейеш, ул ҡабул ителмәгән. Законда асыҡтан-асыҡ яҙылыуынса, “Дәүләт хеҙмәттәре” порталын хәрби иҫәпкә ҡуйыу, сикләү сараларын ҡулланыу һәм алып ташлау тураһында белдереүҙәр ебәреү, шулай уҡ әле төҙөлмәгән повесткалар реестрында мәғлүмәткә инеү өсөн генә ҡулланыу ҡарала.

### "Үлемһеҙ полк" башҡа форматта үтәсәк

"Хәүефһеҙлек маҡсатында быйыл "Үлемһеҙ полк" башҡа форматтарҙа уҙғарыла. Беҙ бөгөн һүҙ алып барған форматтарҙы һайлап, көн дауамында геройҙарыбыҙҙы хөрмәтләп иҫкә алырға тәҡдим итәбеҙ, – тип белдерҙе "Рәсәйҙең үлемһеҙ полкы"ның үҙәк штабы рәйестәше **Елена Цунаева**. – 9 май – байрам, Тыуған илебеҙҙе һаҡлаған геройҙарҙың портреттары был көндөң төп үҙенсәлеге булып тора. Һәр кемгә "Үлемһеҙ полк"тың үҙенә уңайлы форматын һайлап, үҙ геройы тураһында һөйләргә мөмкин".

